**Иглин ауылының урта дөйөм белем биреү 5-се мәктәбендә белем биреү сифатын баһалауҙың эске системаһының контроль үлсәү материалдарына аңлатма**

**4-се класс өсөн дәүләт (башҡорт) теленән йомғаҡлау контроль эше**

**Контроль диктанттың тәғәйенлеше**

Контроль – тикшереү материалдар 4-се класс уҡыусыларының дәүләт (башҡорт) теленән белемдәрен тикшереү өсөн тәғәйенләнгән. Материалдар башланғыс кластарҙа Федераль дәүләт белем биреү стандарттары талаптары нигеҙендә төҙөлгән. Улар уҡыусыларҙың дәүләт (башҡорт) теленән белем кимәлен тикшереүгә, предмет буйынса алған белемдәре һөҙөмтәләре динамикаһын күҙәтергә һәм универсаль уҡыу эшмәкәрлегенең формалашыу кимәлен билдәләргә булышлыҡ итә.

**Маҡсат:** уҡыусыларҙың орфография һәм пунктуация буйынса белемдәрен тикшереү; үткән темаларҙы уҡыусылар тарафынан нисек үҙләштерелеүен тикшереү.

**Диктанттарҙы баһалау**

Диктантты баһалағанда төҙәтелә,әммә иҫәпкә алынмай торған хаталар:
1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәләргә яҙылыштар;
2) әле үтелмәгән ҡағиҙәләргә яһалған хаталар;
3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуация;
4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу.

Тупаҫ булмаған хаталар:
1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;
2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ исемдәрҙә ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;
3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;
4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.

Диктанҡа билдә ҡуйғанда хаталарҙың характерына иғтибар ителә. Хаталарҙы иҫәплләгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә.

Түбәндәге хаталар тупаҫ булмағанға инә: ҡағиҙәнең иҫкәртмәһенә ҡараған хаталар, бәйләү юлы менән яһаған яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышында хаталар, бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу, үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә ялғауҙар яҙылышында хаталар.

Диктант бер генә билдә менән баһалана. “5” – тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктацион хата булған эшкә, “4”- 4 орфографик, 3 пунктацион, йә 1 орфографик, 6 пунктацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хатаһы булған эшкә лә “4” ҡуйырға мөмкин. “3” – 6 орфографик, 6 пунктацион, йә 3 орфографик, 9 пунктацион, йә 12 пунктацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктацион хаталы эшкә лә “3” ҡуйыла. “2”- 9 орфографик, 9 пунктацино йә 8 орфографик, 10 пунктацион хатаһы булған эшкә ҡуйыла.. Хата һаны 15 орфографик хатанан да артып китһә “1” билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

## Контроль эштең баһалау критерияларын

| Контроль диктант | |
|---|---|
| «5» | 1 орфографик, 2 пунктуацион хата |
| «4» | 4 орфографик, 3 пунктуацион хата |
| «3» | 6 орфографик, 6 пунктуацион |
| «2» | 9 орфографик, 9 пунктуацион һәм унан да күберәк. |

## Грамматик эш

| *№* | *яуаптар* | *балл* |
|---|---|---|
| *1.* | <u>Ул</u> Ирәмәл тауынан <u>башлана.</u> | 2 балл<br>1 балл, һәр дөрөҫ яуапҡа |
| *2* | Ирәмәл, Ағиҙел, Кама, Дим, Танып, Инйәр, Өршәк, Башҡортостан | 8 балл<br>1 балл, дөрөҫ яуапҡа |
| *3* | Агидель, Дим | 2 балл<br>1 балл, һәр дөрөҫ яуапҡа |

**Грамматик эште биш балл системаһы менән яңынан иҫәпләүҙең тәкдим ителгән шкалаһы**

| Баһа | «2» | «3» | «4» | «5» |
|---|---|---|---|---|
| Балдар | **4 кәм** | **5-7 балл** | **8-10 балл** | **11-12 балл** |

.

**4-се класс өсөн йомғаҡлау контроль диктанттың демонстрацион варианты**

Предмет: дәүләт (башҡорт) теле

Класс: 4-се класс

**Эште башҡарыу буйынса киҫәтмә**

Уҡытыусы башта тексты уҡып сыға. Өйрәнелмәгән орфограммалы һүҙҙәр алдан уҡ таҡтала яҙылған булырға тейеш. Уҡытыусы кластың әҙерлегенә ҡарап, әйтеп яҙҙырыу темпын үҙе билдәләй.

Тексты орфоэпия, әҙәби тел нормаларына ярашлы уҡыу талап ителә. Уҡытыусыға ярҙам итеү маҡсатында йыйынтыҡ авторҙары тарафынан текстар аҙағында грамматик эш төрҙәре тәкдим ителә.

Диктант яҙылып бөткәс, уҡыусыларға тексты уҡып һәм тикшереп сығыу рөхсәт ителә. Ләкин диктантты баштан уҡ уйлап, аңлап, иғтибарлы яҙырға өйрәтергә һәм һуңғы тикшертеү менән мауыҡмаҫҡа кәрәк. Уҡытыусы тексты икенсе тапҡыр тулы килеш уҡып сыҡҡас та, грамматик эш тәкдим ителергә тейеш.

**Контроль диктант**

**Йылғалар**

Тәбиғәт күрке – һыу. Башҡортостанда йылғалар күп. Иң ҙур йылға – Ағиҙел. Ул Ирәмәл тауынан башлана. Кама йылғаһына барып ҡоя. Ағиҙелгә Дим, Танып, Инйәр, Өршәк йылғалары ҡушыла.

1. 4-се һөйләмдә баш киҫәктәрзең аҫтына һыҙығыҙ. Подчеркни в 4 предложении грамматическую основу.
2. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе табығыҙ. Найдите собственные имена существительные.
3. Слова Ағиҙел, Дим переведи на русский язык.